# Беҙҙен студент йылдары

Туймазы педагогия колледжының Туған телдәр бүлеге гәзите

№ 7, май, 2011 йыл

## *Кыуаныслы яңылык*

**Кәримова Г.Я. башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы,беҙҙең етәксебеҙ:** һеҙгә шатлыҡлы яңылыҡ еткерәм: өсөнсөләр, йәғни 32-се төркөм студенттары



“Беҙҙең студент йылдары” гәзитен сығарыу дилбегәһен үҙ ҡулына алды. Ғәҙәттәгесә, “Публицистик стиль” темаһын өйрәнеү мәлендә, мин беҙҙең студенттарға гәзит сығарыу һәләттәрен күрһәтергә мөмкинселек бирәм. Улар, микротөркөмдәргә бүленеп, гәзиттәр сығара. Быйылғы өсөнсө курсты тамамлаусылар был һынауҙы уңышлы тапшырҙы. Тимәк, бүлек гәзитен сығарыу кеүек яуаплы эште улар актарып сыға аласаҡтар. Хәйерле юл теләйек уларға. Ҡыҙыҡлы гәзиттәр менән беҙҙе ҡыуандырып тороғоҙ.

### *Гәзиттең мөхәррире, Моратшина Л.:*

### *Гәзитебеҙ маҡсаты*

“Беҙҙең студет йылдары” гәзитендә беҙ ҡала һәм районларыбыҙҙа булған актуаль проблемаларҙы күтәрергә тырышасаҡбыҙ. Ә ниндәй проблемалар бөгөн актуаль һуң? Бында иң беренсе әллә нисә йылдар буйы хәл ителмәгән алкоголизм, наркомания, тәмәке тартыу проблемаларын индерергә кәрәктер. Ошо насар ғәҙәттәр арҡаһында күпме кеше бәхетһеҙ, күпме бала етем, күпме йәш егеттәр һәм ҡыҙҙар әрәм булалар... Шул проблеманың үтәлеү юлын эҙләйбеҙ.
Икенсе проблема- тирә- яҡты бысратыу. Бер уйлап ҡараһаң, хәл итерлек. Әммә күп кенә әҫәрҙәр уҡығандан, үҙ күҙҙәребеҙ менән күргән ваҡиғаларҙан һуң, беҙ быларҙың да республикабыҙҙа мөһим икәненә инандыҡ.
Өсөнсөһө лә республикала актуаль проблемаларҙан һанала. Ул – тыуған тел проблемаһы. Юғалып барыусы башҡорт телен тергеҙеү, беҙгә, башҡорт теле уҡытыусыларына бик кәрәкле. Ғөмүмән, уҡытыусыларға ғына түгел, ә бөтә башҡорт халҡының төп проблемаһы ул.
Гәзитебеҙҙә тағы ла ихтирамға лайыҡ кешеләр, ҡыҙыҡлы яңылыҡтарға ла урын буласаҡ. Лайыҡлы кешеләр, аллаға шөкөр, илебеҙҙә ундай кешеләр бихисап. Шулар тураһында һәр һаныбыҙҙа таныштырып барасаҡбыҙ. Студенттар ошо кешеләр аша үҙҙәренә фәһем алыр, бәлки беҙгә үҙҙәренең таныштары тураһында еберер. Әлбиттә, гәзитебеҙҙең һәр һанында яңылыҡтар урын аласаҡ. Унда колледж, республика, ил кимәлендәге яңылыҡтар була. Беҙҙеңсә, был гәзитте уҡыусылар, колледжда ғына түгел, ә бөтә илдә булған яңылыҡтар менән танышып барырға тейеш. «Күстәнәс», «Һаҡланғанды хоҙай һаҡлар», «Студент йылдары- йәшлек яҙҙары» рубликалары уҡыусыларға оҡшар, тип уйлайбыҙ.
Үрҙә һанап үткән проблемаларҙан һуң, беҙ, ошо гәзитте уҡыусыларға, “уян, халҡым, ҡуҙғал, милләтем” тип өндәшәбеҙ.

# Таныш булығыҙ:

*беҙ һеҙҙе мөхәрририәт ағзаларының ҡайһы берҙәре менән таныштырып үтәбеҙ*



Моратшина Ләлә,баш мөхәррир:

Башҡортостанда йәшәүсе һәр кеше республикабыҙҙың киләсәге булырға тейеш. Ә ләкин ундай кешеләр әҙ хәҙерге заманда. Ә Башҡортостандың киләсәгемен һынаған кеше ниндәй сифаттарға эйә һуң? Иң беренсе сиратта, ул үҙ тыуған те тыуған ерен яратырға, үҙ халҡын хөрмәтләргә тейеш. Мин үҙемдә шундай сифа барҙыр, тип уйлайым. Сөнки мин әсә телемде бик яратам һәм хөрмәт итәм тыуған ерем, Бөрйәнде башҡа бер ер ҙә алмаштыра алмай. Ҡайтҡан һайын у тәбиғәтенә, матурлығына һоҡланып туя алмайым. Ҡаланан ҡайтҡанда ла Бөрйән ер килеп етеүебеҙ була, йоҡлап килгән еремдән уянып, тыуған яғымдың гүзәллегенә хай ҡалам. Минең өсөн ундай матурлыҡ башҡа бер ҡайҙа ла юҡтыр кеүек. Башҡорт те Башҡортостанымды ятраҡанға ла мин башҡорт теле уҡытыусыһы һөнәрен һайланым. илемдең, телемдең тарихын ныҡлап өйрәнәм. Илемдең лайыҡлы гражданины булып етеүемә, районыбыҙҙың республиҡабыҙҙың сәскә атыуы хаҡына бик күп изге эш атҡарасағыма ышанам. Сөнки мин- Башҡортостаным киләсәге.

Девизым: тормош баҫҡысы буйлап, яйлап ҡына, тәжрибәләр туплай-туплай үрләргә үрләргә!



Камалетдинова Гөлназ:

Мин, Камалетдинова Гөлназ Вил ҡыҙы, 1992 йылдың 21 февралендә Октябрьский ҡала тыуғанмын. Әлеге ваҡытта Туймазы педагогия колледжының Тыу7ан тел һәм әҙә бүлегендә III курста белем алам. Был һөнәрҙе мин үҙем һайланым. Сөнки, минең уйланыу уҡытыусы һөнәре ҡыҙҙар өсөн иң яҡшыһы тип һанала. Киләсәктә үҙемдең тыуған башҡор һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булырға хыялланам. Үҙемдең телемде бик яратам. Әсә те ятраҡанға ла инде 5-9 синыфҡа тиклем «Урал батыр» эпосы буйынса конкруста ҡатнаш Педагогия колледжында уҡыуыма бик шатмын. Уҡытыусылар а һәр яҡлап ярҙам ҡулы ҡына торалар. Тыныс холоҡломон, тик шаярырға ла яратыусанмын. Кешеләрҙе аңлай б Улар менән аралашып, ауыр ваҡытта ярҙам итергә, кәңәш бирергә һәр ваҡытта ла әҙермен артабан да үҙемдә ошондай ыңғай яҡтарҙы үҫтереп, алған белемдәремде кескәйҙәргә етк хыялланам. Ошо тормошта үҙ юлымды тапҡаныма бик шатмын. Девизым: алға һәм алға!

Моратшин Фил9с:

Мин, Моратшин Филүс Фәтих улы, 1991 йылдың 22 декабрендә Бөрйән районы Мораҙым ауылында тыуғанмын. Әлеге ваҡытта Туймазы педагогия колледжында III курста Тыуған телдәр бүлегендә уҡып йөрөйөм. « Ирмен тигән егеттең әйткән һүҙе хаҡ булыр» тигән девиз менән йәшәйем. Сөнки был һүҙҙәр минеңсә, хаҡ әйтелгән. Егет кеше дөрөҫөн һәм



Әйткән һүҙе хаҡ икән, тимәк, насар ғәҙәттәрҙән ары торорға, илен, тыуған ерен һаҡларға хеҙмәткә барырға бурыслы.

Мостафина Юлиә:



Иҫ киткес илаһи сағымда, «Нанотехнология» осоронда, мин кем, ниндәй маҡсат менән яҡты донъяға оран һалғанмын, киләсәгем нимәлә, атай-әсәйем, уҡытыусылар ниндәй өмөттәр баға- ошолар тураһында уйланам. Эйе, әҙәм балаһы- ер йөҙөндә ҡунаҡ ҡына, ҡунаҡ булһаҡ та, тормош юлын итәгәтле, әҙәпле, тәрбиәле кеше булып, тормош юлында осраған кәртәләрҙе еңеп, яҡшы маҡсаттарға ирешеп йәшәргә, тырышырға кәрәк.

Әлеге ваҡытта мин Туймазы педагогия колледжының III курс талибәһе, буласаҡ башҡорт теле һәм әҙәбиәте укытыусыһы, киләсәктә кес кенә сабыйҙарға тәрбиә биреп, ҙур тормош юлына сығарыусы мөғәллимә. Уҡытыусы һөнәре- изге һәм бик кәрәкле. Сөнки бөтә киләсәк яҙмышы, илебеҙ сәйәси – ижтимағи көнкүреше, технологияларҙың үҫеше, алға барышы, барыһы ла уҡытыусы һөнәренән тамыр ала. Мине5 маbсатым- илебеҙҙең яңы үҫеш алыуында балаларға яңы төр тәрбиә биреүҙә, компьютерҙар заманына инеүҙә ниндәйҙә булһа яңылыҡ индереү маҡсаты менән белемемде юғары уҡыу йортонда дауам итеү.

***Һәм етәксебеҙ – Кәримова Г.Я.***

## *Минең яратҡан уҡытыусым*

Уҡытыусы- иң мөһим һәм кәрәкле һөнәрҙәрҙең береһе. Уҡытыусылар булмаһа, бөтә кеше наҙан булыр ине. Уларҙың хеҙмәте ауыр, ҡатлаулы.

Бәләкәй саҡта мин уҡытыусы булыуы бик еңелдер тип уйлай инем. Ләкин үҫкәс, шуны аңланым: һәр кемдеңдә бындай һөнәр һайларлыҡ һәләте юҡ. Бик түҙемле, башҡалар менән аралаша белеүсе һәм белемле кешеләр генә уҡытыусы була ала.

Миңә үҙ ғүмеремдә күп уҡытыусыларҙа уҡырға тура килде. Беренсенән алып өсөнсө синыфҡа ҡәҙәр мине өс уҡытыусы уҡытты. Мәктәпте тамамлағас мин Туймазы педагогия колледжына уҡырға килдем һәм хәҙер ҙә уҡыуымды шунда дауам итәм. Беҙҙең колледжда уҡытыусылар күп, улар бөтәһе лә бик һәйбәт, үҙ һөнәрҙәрен белә һәм яраталар. Мин бөтә уҡытыусыларҙы ла хөрмәт итәм һәм беҙгә белем биреүҙәре өсөн уларға рәхмәтлемен. Ләкин минең яратҡан уҡытыусым берәү генә. Ул- Гөлнара Яхъя ҡыҙы. Үҙ эшен яратып башҡарыусы, юғары категориялы уҡытыусы. Ул беҙҙе гел яҡшылыҡҡа ғына өйрәтә, тәртипле булыуыбыҙҙы теләй. Гөлнара Яхъя ҡыҙын, беҙ икенсе әсәйебеҙ тип алып йөрөтәбеҙ. Әсәйҙәребеҙ кеүек ул да беҙҙе кәрәк саҡта маҡтай, ә ҡайсаҡ әрләй ҙә. Ләкин беҙ уға үпкәләмәйбеҙ, ә киреһенсә, хатабыҙҙы төҙәтергә һәм апай әйткәнсә эшләргә тырышабыҙ. Ул һәр ваҡыт беҙҙең өсөн ҡайғыра.




Гөлнара Яхъя ҡыҙы һәр ваҡыт дәрестәрҙе ныҡлап өйрәнергә ҡуша. Сөнки киләсәк тормошобоҙҙа колледжда туплаған белемдәребеҙ беҙгә кәрәк буласағын яҡшы аңлай.

Мин уны5 дәрестәрендә ултырырға яратам. Сөнки ул һәр ваҡыт теманы беҙгә ентекләп аңлата. Ауырыраҡтарын беҙгә аңлашылғанса йөҙ тапҡыр аңлатырға ла риза.

Гөлнара Яхъя ҡыҙының барлыҡ сифаттары ла миңә бик оҡшай.Шуға күрә ул - минең яратҡан уҡытыусым.

*Мостафина Ю. (32-се т2рк2м*



*Май яңылыҡтары*

## *16 майҙан 21 майға тиклем ҡала һәм районыбыҙҙа Башҡорт мәҙәниәте аҙналығы үтте*

Туймазы районында башҡорт мәҙәниәте аҙналығы уҙғарылды.Был аҙналыкта бик ҡыҙыҡлы һәм фәһемле саралар ойоштоpолдо.Шуларҙың береһе әҙибә Таңсулпан Ғарипова менән осрашыу булды.

Конференцияла Таңсулпан Ғарипованың “Бөйрәкәй”романы тураһында һүҙ барҙы.Был конференцияла Туймазы ҡалаһының төрлө мәктәптәренән йыйылған башҡорт теле уҡытыусылары ҡыҙыҡлы доклaдтар менән сығыш яһанылар.Сарала беҙҙең колледж студенттары ла бик әүҙем ҡатнаштылар.Быға Моратшина Ләлә һәм Камалетдинова Гөлназдың сығыштары асыҡ миҫал булып тора.

Докладтар һуңынан тамашысылар үҙҙәрен ҡыҙыҡһындырған һорауҙарҙы бирҙеләр. Әҙибә “Бөйрәкәй” романының яҙылыу тарихын һөйләп үтте һәм һорауҙарға бик ентекле итеп яуап бирҙе.

Яҙыусы өсөн иң мәртәбәле баһа-ябай уҡыусының мөхәббәтенә өлгәшеүҙер.Туймазы ҡалаһындағы осрашыуҙан Таңсулпан апай был баһаны тағы алып,иламһырап ҡайтҡандыр.

*Хәкимова С. (32-се төркөм)*

## *Һәр кемдең үҙ тауышы*

*Йыр- халыҡ күңеленең көҙгөһө, тиҙәр. Эйе, шанлы тарих, тыуған ил хозурлығы, аяныслы ҡатын-ҡыҙ яҙмышы, батырҙарыбыҙ тормошо, һынауҙарға дусар ителгән мөхәббәт- һәммәһе лә халҡыбыҙ йырҙарында сағылыш тапҡан. Халыҡ йырҙарын башҡарыу айырыуса ҙур яуаплылыҡ, фәлсәфәне аңлап, образға инеүҙе талап итә.*



17 майҙа Туймазы ҡалаһының музыка мәктәбендә шаулап-гөрләп йылдың матур мәҙәни сараһы “Башҡорт йыры”бәйге үтте.

Концертта Туймазы районының ауылдарынан йыйылган йәш йондоҙҙар сығыш яһап тамашасы яратып өлгөргән йырҙарҙы башҡарҙы.

Туймазы ҡалаһы музыка мәктәбе уҡыусыһы Динар Фәйзуллин башҡарыуындағы йырҙан һуң тамашасылар бик оҙаҡ ҡул саптылар.Ҡатнашыусылар маҡтау ҡағыҙына һәм башҡа бүләктәргә лайыҡ булдылар.

Һандуғастар йыйыны йырҙары,мондары менән күңелдәрҙе иләҫ-миләҫ килтереп сорнап үтеп тә китте.Йыр өлкәһендә даими эшләгән ижадсыларҙың эше тап ошо йыр байрамында күренә.

*Мырҙағолова Т. (32-төркөм)*

*Башkорт телендә һөйләшәм*
*Башkорт илендә*

Туймазы педагогия колледжының 32-се төркөм студенты Хәмидуллина Динара үткән аҙнала Туймазы kалаһында үткән конференцияла kатнашты. Ул сығышын



арҙаklы башkорт шәхестәренә арнап «Сая шәхестәр сафында» тигән доклад менән сығыш яһаны. Был хеҙмәте өсөн рәхмәт хаты менән бүләкләнде.

Бөгөн беҙгә унын менән осрашып, аралашыу бәхете тейҙе.

***- һаумыһығыҙ, Динара Фәрил kыҙы. Беҙ һеҙҙе уңышлы ижад емешегеҙ менән kотлайбыҙ.һеҙ уйҙарығыҙ менән** урталаклашһағыҙ, **беҙ шат булыр инек.***

***-һеҙҙә был сара ниндәй тойғолар уятты?***

- Был конференцияла kатнашыу миңә бик оkшаны һәм тыуған илем – Башkортостанға, тыуған халkыма йылы хистәр уятты. Ошонан һуң мин кеше күңеленә тәьсир көсөн нығыраk тойҙом.

***-һеҙгә был эште башkарып сығыуҙа ниндәй сифаттар ярҙам итте?***

-Миндә уңышkа ынтылыу теләге көслө. Бының өсөн ныkышмалылыk, егәрлелек, тырышлыk, kыйыулыk кәрәк. Сөнки оло талант шундай уk эшһөйөүсәнлек талап итә. Ә бигерәк тә үҙ етәксемә, Кәримова Гөлнара Яхъя kыҙына ҙур рәхмәтемде белдереп үткем килә.Ул юk ваkытын бар итеп, бөтә эштәрен ситкә kуйып, миңә ярҙам kулы һуҙҙы. Уға киләсәктә аk бәхеттәр, ныkлы һаулыk, эштәрендә уңыштар теләп үтәм.

***-Гәзит уkыусыларға нимәләр әйтер инегеҙ?***

-Республикабыҙҙың, Рәсәйҙең киләсәген kайғыртырлыk һәләтле йәштәр күп. Шуға киләсәгебеҙ яkты, иң kояшлы тип әйтә алам. Кешенең рухи үҫеше матди байлыkтан kалышмаҫkа тейеш. Тиҫтерҙәремә донъя мәҙәниәтен өйрәнеп, юғарыраk үрҙәргә артылыуҙарын теләйем. Мин үҙем дә камиллыkkа ынтылам.

***-Әңгәмәгеҙ өсөн рәхмәт. Артабан да уңыштар юлдаш булһын һеҙгә.***

*Әңгәмәсе - Ишинбаева Людмила*

## *һуңғы kыңғырау әйҙәй яkты киләсәккә*

Бөгөн студенттар тыуған колледждары,яратkан уkытыусылары,иң яkын дуҫтары менән һәм шулай уk ғүмерҙәренең иң гүзәл мәле-студенты йылдары менән хушлаша.һуңғы kыңғырау тантанаһы-йыл дауамында үткән байрамдарҙың иң иҫтәлекле,иң сауығылыр ул.4-5 йыл эсендә танымаҫлыk булып үҙгәргән йөҙҙәренән йәштәргә kарап һоkланмау мөмкин түгел.

Колледжды быйыл бөтәһе өс курс тамамлай.”Иң мөһиме-тормошта үҙ юлдарын тапһындар”,-тип теләй колледж директоры А.М.Казаков,сығарылыш студенттарын колледжды тамамлауҙары менән тәбрикләп.

53- сө төркөм етәксеһе Вәлиуллина Э.В., 52-се төркөм етәксеһе_Фатихова З.С.,41-се төркөм етәксеһе Зиганшина Р.Ф.колледж иң-көслөлө етәкселәрҙән һанала.




Быйылғы сығарылыш студенттарының күбеһе артабан юғары уkыу йортонда белем алыуын дауам итергә хыяллана. Уkытыусыларҙың.ата-әсәләренең изге теләктәренә kушылып,беҙ ҙә уларға хыялдарының тормошkа ашыуын,бараһы юлдарының яkты һәм һикәлтәһеҙ булыуын теләйек.

*Мырҙағолова Т.(32-се төркөм)*

# Беренсе мөхәббәт

## Хикәйә

Кис. Өй. Өйҙә ут яна. Ҡыҙ өй эше эшләй. Һәр вакыт. Акыллы kыҙ, тырыша. Бер үҙе. Ултыра. Өй эше. Телефон. Шылтырай. Трубканы ала.

- Эйе.
- Һаумы! Танынынңмы?
- Һаумы! Юk. (ә үҙе таныны бит)
- Был мин, Фидәрис! Һинең хәлдәр нисек?

Йөрәк тибә. Үлтергес итеп. Ҡулдар kалтырай.

- Рәхмәт. Якшы. Үҙең нисек?
- Якшы. Бөгөн кис менән ни эшләргә йыйынаһың?
- Белмәйем. Өй эштәре мөмкин.
- Әйҙә тышkа, йөрөп керербеҙ. Бер беребеҙҙе якшырак белербеҙ.

Ҡыҙ тынып kалды. Ул ышана алмағайны. Ул. Унын мөхәббәте.

- Ярар, бәй.
- Якшы. Улай булһа киске етелә паркта, яраймы?
- Эйе, эйе. Әлбиттә.

Трубканы kуйҙы. Тынып kалды. Йоkлай тип уйлағайны. Юk, ысынлап та. Ул шылтыратты. Үҙе. Юk, ул көләләр? Ниңә уға мин кәрәк? Күп бит аkыллы, сибәр, матур kыҙҙар. Ә мин ябай ғына.



Сәғәт 18:30. Кейенде. Сыkты. Бара. Ҡайғыра. 19:00. Баҫып тора. Көтә. Ул килә. Шундай матур, сибәр.

- Һаумы, тағын бер тапkыр!
- Һаумы.

Баралар, һөйләшеп киттеләр. Аkыллы ул. Ә унын бер көләүе баштарҙы әйләндерә.

- Һин мине ниңә тышkа саkырҙың?
- Былай ғына, ә ниңә?
- Юk. Бер нимә лә, мин уйлағайным һин миңә kарамаҫһың тип.
- Иии, йүләр ҙә инде.Һин миңә күптәнән оkшайһың. Һин матур, сибәр, тыныcһың. Бөтәһенә лә ярҙам kулы һуҙаһың. Һин икенсеһең, бүтән kыҙҙар кеүек түгелһең.
- Рәхмәт.

Бик тә рәхәт kыҙға быңдай һүҙҙәр ишетеүе.

Ул хатта kыҙарып ките. Шундай һүҙҙәр. Беренсе егеттән әле ул.

Өс ай, биш ай, ете ай. Улар бергә, бер-береһен яраталар. Күңелле. Беренсе илау. Беренсе асыуланышыу... Бер йыл үтте. Улар бергә. Ул ярата, kыҙ ҙа ярата. Улар бәхетле. Был ғүмер буйы дауам итәсәк... *Сәләхова Л. (32-се төркөм)*

## Һаулыkты һатып алып булмай

Тәмәкенең зарары ифрат ҙур булған өсөн, ғалимдар тәkдиме менән быңдай көн иғлан ителә лә инде.Йыл һайын планетабыҙҙа 3-3,5 миллион кеше тәмәкенән ағыуланып үлә.Белгестәр никотин кеше ғүмеренең 8-10 йылын кәметә тип раҫлай.

Хәҙер уkыусыларҙың, хатта kыҙҙарҙың тәмәке көйрәтеп тороуҙары гәҙәти күренешкә әйләнә бара.Урам буйҙарында бер kулына – сигарет, икенсеһенә һыра тотkан гүзәл затты күреп аптырарһың. Тәмәкене, һыраны рекламалаусылар ҙа тырыша.Шуларҙы күреп тиҙерәк тәмләп kарағы, егет kорона инеү теләге тыуа. Насар ғәҙәттәрҙең сәскә атыуына юл kуйырға ярамай.

## Һаkланғанды хоҙай һаkлар

Тәмәкене ауыҙға бер kасан да алмаһағыҙ, отасаkһығыҙ ғына.Һаулыkты бер ниндәй аkсаға ла һатып алып булмағанлығын онотмаҫkа кәрәк.

Миңзәлә Асkарованың шиғыры минең һүҙҙәремде раҫлай:

***Зәңгәр үлем***
***Миллиондарса кеше үлә...***
***Йыл һайын ерҙә.***
***Ғүмерҙәрен алмаштырып***
***Ҡараңғы гүргә.***
***Тәмәке тартыу буйынса***
***Иң алда Рәсәй,***
***Зәңгәр төтөн һура хатта***
***Балалы әсәй.***
***Рәсәй- әсәй.Беҙ бит һинең***
***Киләсәк- балалар.***
***Зәңгәр үлем тырнағынан***
***Кем һуң аралар?!*** *«Йәншишмә» гәзитенән*

**Тәбиғәтте һаҡлайыҡ!!!**

Ер шарының картаһына
Ҡараһаң яҡшы ғына
Башҡортостан шул картала
Бер япраҡ саҡлы ғына.
( М. Кәрим.)



Эйе, ысынлап та картала Башҡортостан бер япраҡ саҡлы 7ына. Ул шундай матур ерзәр8ә урынлашҡан, хатта һәр киткән кеше тыуған яғын һағынып кире әйләнеп ҡайта.
Беҙҙең кескәй һәм йәмле Туймазы ҡалаһы ла Башҡортостандың матур бер ерендә урынлашҡан...Тик ниңә һуң ошо матурлыкты ҡала кешеләре күрмәй, һаҡламай!Ҡайһы бер ерҙәрендә күпме сүп ята, бөтәһе лә шуны күрә, әммә берәү ҙә уны таҙартырға уйламай, урап үтә. Беҙҙең шуны күреп йәнебеҙ көйә һәм ҡала кешеләренә еткерер өсөн фотоһүрәткә төшөрөп, гәзиткә ебәрергә уйланыҡ.Туймазы педагогия студенттары һәр суббота үҙҙәренә тейешле территорияны йыйыштыралар. Беҙҙең төркөмөбөҙ ҙә бергәләшеп, тырышып территорияны йыйыштырып ҡуя.
Әйҙәгеҙ әле, Туймазы халҡы, уяныгыҙ! Үҙебеҙҙең ҡалабыҙҙы беренселеккә сығарайыҡ әле!

*Камалетдинова Г.Үһө-се төркөм)*

## Р. Бикбаевтың “Һыуһаным һыуҙар бирегеҙ”поэмаһында экологик проблемалар

Р. Бикбаев “Һыуһаным һыуҙар бирегеҙ» поэмаһында Ағиҙелдең бөгөнгө һәм киләсәге тураһында яҙған. Ағиҙел Башҡортостанда иң оҙон һәм саф йылғаларҙың береһе. Был йылға бәләкәй генә инештән башланып, үҙенә башҡа йылғаларҙы ҡушып ала ла, тау-таш ярып, бормаланып-бормаланып ағып төшөп диңгеҙгә ҡушыла. Ләкин Ағиҙелдең сафлығы, таҙалығы бөгөнгө көндә беҙгә уйланырға мәжбүр итә. Уның һыуына ҡушылып аҡкан бысраҡты, ярҙарындағы сүп-сарҙы күреп йәрәк әрней. Ҡасандыр беҙҙең ата- бабаларыбыҙ Ағиҙелгә ғорурланып, һоҡланып ҡараһа, бөгөнгөләр уға ҡарап хурлана. Бына ошо проблеманы Р. Бикбаев беҙгә поэмаһы аша еткерә.



Әлбиттә, поэманы уҡый башлағас тағы бер һорау тыуа: Ағиҙелдең былдай хәлгә ҡалыуына нимә сәбәпсе булған? Р. Бикбаев та бының турала уйланғандыр, күрәһең, поэмала былай тигән юлдар бар: «Ағиҙелгә терегөмөш ағып,Ағыулауын күрһә Нигмәти,Ниндәй оран һалыр ине шағир,Әйтер ине бөгөн нимә тип?» Бының менән ул халыҡҡа тәбиғәттең бысраныуына үҙебеҙ ғәйепле икәнебеҙҙе күрһәтергә теләгән. Беҙ завод, фабрикалар төҙөп үҙебеҙгә файҙа килтерһәк тә, уның тәбиғәткә ниндәй зыян килтереүен белеп етмәйбеҙ. Завод тобаларынан сыҡҡан ҡара төтөн , унан ағып төшкән нефть һәм башҡа ағыулы матдәләрҙең тәбиғәткә зыян икәнен аңлатырға теләгән шағир. Әммә кеше тәбиғәтһеҙ йәшәй алмаған кеүек, завод, фабрикаларһыҙ ҙа йәшәй алмай.
Шулай булыуына ҡарамаҫтан, беҙ үҙебеҙҙең киләсәгебеҙҙе уйлаһамаҡ килер быуын һоҡланып ҡарарлыҡ урын ҡалмаясаҡ. Шуға күрә Ағиҙелдең киләсәге менән бергә бөтә тәбиғәттең киләсәген уйларға ваҡыт еткәндер. Ағиҙелдең һыуын мөмкин тиклем бысратмаҫҡа тырышыр кәрәк. Уның саф, таҙа, тәмле һыуы әле лә ағып ята. Элеккегә ҡарағанда уның әлеге торошо күпкә ҡайтышыраҡ булһа ла, Ағиҙел ер йөҙөнән юҡҡа сыҡмаған. Уның ярҙарындағы урмандар,тауҙар,кейек ҡоштар,ғөмүмән әйткәндә,бөтә тәбиғәт йәшәй һәм йәшәйәсәк. Әммә киләсәк быуындарға ошо матурлыҡты еткереү өсөн беҙгә тәбиғәттең ҡәҙерен белергә, уны ҡурсаларға кәрәк. Уның киләсәге беҙҙең ҡулда- кешеләр ҡулында.
Поэманы уҡып сыҡҡас, йөрәккә ниндәйҙер шом килә. Ысынлап та, беҙ үҙ ҡулдарыбыҙ менән бөтөрәбеҙ түгелме тәбиғәтте. Р. Бикбаев беҙҙе ҡурҡытырға теләмәй, ә тәбиғәтте һаҡларға саҡыра. Бына ошоноң менән поэма әһәмиәтле. Миңә был поэма бик оҡшаны. Сөнки минең тыуған ауылым Ағиҙелдең ярында ғына урынлашҡан. Уның һыуында ҡойоноп үҫкәнмен. Бөгөнгө көндәге хәленә мин үҙем дә шаһитмын. Шуға күрә поэмала Ағиҙел тураһында булған өҙөктәрҙе айырыуса ентекләп уҡыным. Р. Бикбаевтың тәбиғәттең киләсәге тураһында яҙылған был поэмаһы ҡыуандыра.

*Ф. Моратшин (32-се төркөм)*

## *Тыуған ауылымдың тарихҡа бай тауҙары...*

*Минең тыуған ауылымды бик матур тау-kаялар уратып алған. Уларҙың тарихы менән kыҙыkһынып, ололарҙан һорашып яҙып аламын. Шуларҙың бер нисәһен һеҙгә лә яҙып үтәм.*



Инсебикә ҡаяһы

Беҙҙең ауылда Инсебикә исемле һуҡыр ҡыҙ була. Уны үҙҙәре менән бергә гел генә дуҫтары һүрәттә күрһәтелгән ҡаяға уйнарға алып барыр булғандар. Шулай бер барғандарында Инсебикәне ҡая башына ултырталар ҙа үҙҙәре уйнай-уйнай йыраҡҡа китәләр. Ә кире килеүҙәренә ҡыҙ урынында булмай. Уның тик яулығы ғына ятып ҡала. Аҙаҡ Инсебикәне ҡая аҫтында табып алалар. Ошо ҡыҙғаныслы ваҡиғанан һуң был ҡаяны Инсебикә ҡаяһы тип атай башлайҙар. Был бейек, ҡурҡыныс ҡая янынан кешеләр өҙөлмәй. Төрлө яҡтарҙан киләләр, ҡарап хайран ҡалалар. Хайран ҡалмаҫлыҡмы ни?!

Әреүәрҙе тауы

Был тауҙың тарихы борон-борон замандарға барып тоташа. Һуғыш ваҡытында бер ҡатын йәш балаһы менән яңғыҙы ғына тороп ҡала. Аслыҡтан нисек ҡотолорға белмәй, улар урман буйлап сығып китәләр. Балаһы бәләкәй була ҡатындың. Шундай аслыҡ ваҡытында бала әсәгә- шатлыҡ түгел, ә ҡайғы ғына була. Улар йөрөй торғас ошо тауға, йәғни, Әреүәрҙе тауына килеп менәләр. Уның башында бик матур ялансыҡ , ана шул ялансыҡта бала сәскәләр араһында бөтөн донъяһын онотоп уйнай башлай. Әсәһе илай-илай ҡарап ултырған да ошо тауҙа баланы сәскәләргә әүерәтеп, ҡалдырып сығып киткән. Баланы әүерәтеп алып ҡалған тауҙы хәҙер, үҙгәртеп Әреүәрҙе тип йөрөтәләр.

Әбей тауы

Был да борон булған ваҡиға. Беҙҙең ауылдағы оло инәйҙәр әбейҙәр сыуағы еткәс, ошо тауға менеп ултырыр булғандар. Улар менән балалар ҙа сыҡҡан. Йәштәр уйын уйнағандар, ә ололар сәй эсеп, донъя тураһында фекер алышҡандар. Ошо ауылыбыҙҙы икегә бүлеп ултырған тауҙы, хәҙер Әбей тауы тип атап йөрөтәбеҙ.

Һәйеткүлән тауы

Борон-борон заманда ауылыбыҙҙа Һәйет исемле бер һунарсы бабай йәшәгән. Бер ваҡыт ул ошо тау башына ҡабан сусҡалары ауларға сығып киткән. Әммә кире әйләнеп ҡайтмай. Уны бик оҙаҡ эҙләйҙәр. Аҙаҡ ҡабан сусҡалары ашаған тигән һығымтаға киләләр. Ә ул үлгән тауҙы Һәйет үлгән тип атайҙар. Ваҡыт үтеү менән ул тау Һәйеткүләнгә әйләнә.

*Моратшина Л. .(32-се т2рк2м)*

---

**Гәзитте ойоштороусы-** башkорт теле уkытыусыһы Кәримова Г.Я.

**Баш мөхәррир-** Моратшина Л.

**Мөхәрририәт**:
Моратшин Ф., Хәмиҙуллина Д.
Ишинбаева Л., Мостафина Ю.,
Камалетдинова Г.

**Беҙҙең адрес: Туймазы kалаһы, Комаров урамы, 8б**